“01” 01 №2

протоколы менән педагогтар советы ултырышында
Кабул ителде

“18-се башҡорт балалар баҡсаһы” МАББУ
мөдире _____/Э.Б. Хисамова
№ 103 бойороғо менән “01” 11 2019 йыл

Раҫланды

Комплекслы тематик план

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Тема	Тәҡдим ителгән үткәреү ваҡыты	Эш йөкмәткеһе	Ойоштороу формалары	Йомғаҡлау саралары вариантта ры
Һаумы, балалар баҡсаһы!	1-се аҙна (сентябрь)	Балаларҙа балалар баҡсаһына һәм яңы төркөмгә килеү шатлығы тойғоһон уятыу. Баланы яңы төркөм һәм тирә-яҡ мөхит менән таныштырыуҙы дауам итеү. Баҡса хеҙмәткәрҙәренең (тәрбиәсе, тәрбиәсе ярҙамсыһы, ашнаҡсы) исемен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү, уларҙың хеҙмәте менән таныштырыу, балалар баҡсаһына йөрөү ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрөү. Үҙ-ара һәм ололар менән ниндәй мөнәсәбәттәр ҡоророға кәрәклеген ҡабатлау. Телмәр байлығын үҫтереү. Тәрбиәсе профессияһына ихтирам тәрбиәләү.	Сюжетлы ролле уйындар “Балалар баҡсаһы”. Тема буйынса әңгәмәләр. Гимнастик күнегеүҙәр (күҙҙәргә), хәрәкәтле уйындар. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау; йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Тәрбиәселәрҙең эшен күҙәтеү. Дидактик уйындар: “Кәрзинкәңдә нимә бар?”, “Көҙ билдәләрен әйт”, “Был ҡайсаҡ була?” Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау. Йомаҡтар сисеү.	Күңел асыу сараһы “Белем иленә сәйәхәт”
Ғаиләм – ҡалғам!	2-се аҙна (сентябрь)	Балала үҙ ғаиләһе менән ғорурланыу хисе уятыу, яҡындарын ҡайғыртыу, уларға ярҙамлашыу тойғолары тәрбиәләү. Үҙ исемен, фамилияһын, атаһының исемен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү. Ғаилә төшөнсәһен аңлатыу - бергә йәшәгән яҡын кешеләр, туғанлыҡ терминдарын аңлатыу. Ғаилә ағзаларының башҡарған эштәре. Буш	Сюжетлы ролле уйындар “Ғаилә”. Тема буйынса әңгәмәләр. Гимнастик күнегеүҙәр (күҙҙәргә), хәрәкәтле уйындар. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау; йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Дидактик уйындар: “Кәрзинкәңдә нимә бар?”, “Көҙ билдәләрен әйт”, “Был ҡайсаҡ	«Куянҡай үҙенә нисек әсәй эҙләгән?» Ҡурсаҡ театрын

		ваҡытты бергәләп үткәреү формалары. Гендер тәрбиәһе буйынса күҙаллауҙар үҫтереү. Ғаиләгә ҡарата ғорурланыу хистәрен тәрбиәләү.	була?”. Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау. Йомаҡтар сисеү. «Минең татыу ғаиләм». фотоальбомын төҙөү.	күрһәтеү.
Юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләре	3-сө аҙна (сентябрь)	Транспорт төрҙәре менән, элементар юл ҡағиҙәләре менән; шофер, автобус йөрөтөүсе кеүек профессиялар менән таныштырыу. Гендер тәрбиәһе буйынса күҙаллауҙар үҫтереү. Юл ҡағиҙәләрен дөрөҫ үтәргә өйрәтеү, ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.	Сюжетлы ролле уйындар “Мин – машина йөрөтөүсе”. Тема буйынса әңгәмәләр. Хәрәкәтле уйындар. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау; йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Дидактик уйындар: “Был нимә?”, “Айырып һал”, “Был ниндәй транспорт төрө” Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау. Йомаҡтар сисеү.	Балалар эштәре менән күргәҙмә “Мин юл ҡағиҙәләрен үтәйем!”
Хеҙмәтенә күрә хөрмәте	4-се аҙна (сентябрь)	Балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәре һөнәрҙәре тураһында белемдәрен киңәйтеү (тәрбиәсе, тәрбиәсе ярҙамсыһы). Диалогик телмәр үҫтереү. Тәрбиәсе һөнәренә ыңғай мөнәсәбәттәр булдырыу. Ололарға ҡарата ихтирам тәрбиәләү.	Тәрбиәселәрҙең эшен күҙәтеү. Тема буйынса әңгәмәләр үткәреү. Шиғырҙар уҡыу, ятлау; йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Һүрәттәр ҡарау. Сюжетлы-ролле уйын “Балалар баҡсаһы”.	Тәрбиәселәр көнөнә күңел асыу сараһы.
Алтын көҙ	1-се аҙна (октябрь)	Көҙ миҙгеле үҙенсәлектәренең алмашыныуын төшөндөрөү. Кешеләрҙең хеҙмәте, йәшелсә-емештәр тураһында белемдәрен арттырыу. Тәрбиәсе менән бергә кипкән япраҡтарҙы йыйыу. Экологик үҙаң нигеҙҙәре үҫтереү, тәбиғәт объекттарына ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү , тәбиғәтте эстетик тойомлау формалаштырыу, тыуған яҡҡа ҡарата һөйөү тәрбиәләү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау, йомаҡтар сисеү, көҙ билдәләре буйынса халыҡ әйтемдәрен өйрәнеү. Һүрәттәр төшөрөү. Саф һауала күҙәтеүҙәр. Иллюстрациялар ҡарау. Түңәрәк уйындары уйнау, йырҙар өйрәнеү. Балалар эштәре менән күргәҙмә “Алтын көҙ”.	Күңел асыу сараһы «Көҙһылыу ҡунаҡта».
“Башҡортостан – гөлбостан”	2 – се аҙна (октябрь)	Тыуған яҡ менән таныштырыуҙы дауам итеү. Тыуған яҡта йәшәүсе йәнлектәр, ҡоштар тураһындағы белемдәрен тәрәнәйтеү. Диалогик телмәр үҫтереү. Тыуған яҡҡа һөйөү тәрбиәләү, ҡыҙыҡһыныу уятыу.	Әңгәмәләр ойоштороу. Дидактик уйындар “Был ниндәй флаг”,”Был ниндәй үҫемлектең япрағы” h.б. Тыуған яҡ тураһында нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау. тәбиғәт пейзажын һүрәтләгән картиналар, иллюстрациялар ҡарау.	“Мин Затон биҫтәһендә йәшәйем!” фотокүргәҙмә
Икмәк – ил байлығы	3-сө аҙна (октябь)	Балаларҙы баҫыуҙа үҫкән башаҡлы үҫемлектәр (бойҙай, һоло, арпа) һәм уларҙан төрлө аҙыҡтар әҙерләү тураһында балаларға белемдәр биреү. Ауыл хужалығы эшсәндәренең профессиялары тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Элементар экологик күҙаллауҙар	Сюжетлы – ролле уйындар “Магазин”. Диактик уйындар: “Нимә бешерҙем”, “Икмәк нисек өҫтәлгә килә?”, “Үҫемлекте атап әйт”, “Өлөштәрен әйт”. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар өйрәнеү. Йырҙар тыңлау., өйрәнеү.	Слайдттар ҡарау “Икмәк – йәшәү

		үҫтереүҙе дауам итеү. Башҡорт милли аштары менән таныштырыуҙы дауам итеү (ҡурмас, талҡан, һалма, бишбармаҡ һ.б.). Болонда, туғайҙа үҫкән үҫемлектәр тураһында балаларҙың белемдәрен арттырыу. Тәбиғәткә ҡыҙыҡһыныу уятыу, һөйөү тәрбиәләү.	Түңәрәк уйындары уйнау. Уйын ситуациялары булдырыу. Әңгәмәләр. Иллюстрациялар ҡарау. Әүәләү.	сығанағы”.
Сөмбөлә	4 –се аҙна (октябрь)	Балаларҙың көҙ тураһында белемдәрен киңәйтеү. Йәнле һәм тәбиғәт күренештәре араһындағы бәйләнеште күрә белеүен формалаштырыу (көндәр һуыта, күбәләктә юҡ булды, сәскәләр һулыны һ б.) сезон буйынса күҙәтеүҙәр ойоштороу. Ауыл хужалығы һөнәрҙәре тураһында балаларҙың белемдәрен арттырыу. Баҫыуҙа үҫкән башаҡлы үҫемлектәр менән таныштырыу. Йәшелсәләр һәм емештәр тураһында белемдәрен киңәйтеү. Элементар экологик күҙҙалауҙар формалаштырыу. Тәбиғәттә хәүефһеҙлек һаҡлау буйынса күҙаллауҙарын үҫтереү. Тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау, йомаҡтар сисеү, көҙ билдәләре буйынса халыҡ әйтемдәрен өйрәнеү.йәшелсә – емештәр тураһында йомаҡтар уйлап сығарыу. Дидактик уйындар “Был ниндәй йәшелсә”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”. Саф һауала күҙәтеүҙәр. Иллюстрациялар, слайдтар ҡарау (ауыл хужалығы эштәре буйынса). Түңәрәк уйындары уйнау, йырҙар өйрәнеү.	Балалар эштәренән күргәҙмә “Алтын көҙ”
Дуҫлыҡ ептәре	1-се аҙна (ноябрь)	Балаларға байрам тураһында мәғлүмәт биреү, Рәсәй Федерацияһында ниндәй халыҡ йәшәй, билдәле шәхестәр менән, Дәүләт символдары менән таныштырыу. Хәтерҙе, телмәрҙе, фекерләүҙе үҫтереү. Тыуған яҡҡа патриотик хис тойғолар уятыу, һөйөү тәрбиәләү.	Тема буйынса әңгәмәләр үткәреү. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау, һүрәттәр, фотоһүрәттәр ҡарау. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Минең дуҫтарым”, “Был нимәнең өлөшө”, “Тәбиғәттә үҙ – үҙеңде тотоу”, “Һөйләү буйынса таны”	Күңел асыу сараһы “Берҙәмлек көнө”
Башҡорт халыҡ ижады	2-се аҙна (ноябрь)	Башҡортса саф матур итеп һөйләшеү. Балаларҙы башҡорт халыҡ ижады менән таныштырыу (башҡорт халыҡ әкиәттәре, йомаҡтары, йырҙары). Хәтерҙе, телмәрҙе, фекерләүҙе үҫтереү. Башҡорт халыҡ ижадына ҡарата ихтирам тәрбиәләү, ҡыҙыҡһыныу уятыу.	Тема буйынса әңгәмәләр үткәреү. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау, һүрәттәр, ҡарау, йырҙар тыңлау һәм йырлау. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”	“Эт үҙенә нисек хужа тапҡан” әкиәтен сәхнәләштереү

Халҡым биҙәктәре	3-сө аҙна (ноябрь)	Башҡорт халҡының кейем-һалымдары, һауыт-һабалары, биҙәктәре менән таныштыра башлау, уларҙың атамаһын иҫтә ҡалдырыу, дөйөмләштереү һүҙҙәре менән әйтеү. Кейем-һалым, һауыт-һабаның кеше тарафынан эшләнгәнен, зауыҡлы биҙәлгәнен, уларҙың көнкүреш, йәшәү өсөн кәрәк булыуын балаларға еткереү. Хәтерҙе, телмәрҙе, фекерләүҙе үҫтереү. Өлкәндәр хеҙмәтенә ихтирам тәрбиәләү.	Тема буйынса әңгәмәләр үткәреү. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, һүрәттәр ҡарау, шиғырҙар һөйләү, Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Фотоһүрәттәр ҡарау. Мәҡәлдәр, әйтемдәр өйрәнеү. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай” Милли кейемдәр, Һауыт-һаба биҙәү	Ҡурсаҡтың камзулына тәңкә төшөрөү
Әсәйҙәр көнө	4-се аҙна (ноябрь)	Әсәй – донъяла иң яҡын, яғымлы, наҙлы, иң ғәзиз кеше, балаға һөйөү, наҙ биреүсе. Ә атай кешенең ҡыйыу, көслө, баһадир булыуын аңлатыу. Әсәйҙәргә ҡарата һөйөү, ихтирам хисе тәрбиәләү.	Тема буйынса әңгәмәләр үткәреү. Сюжетлы-ролле уйын “Ғаилә”. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, һүрәттәр ҡарау, шиғырҙар һөйләү, Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Фотоһүрәттәр ҡарау. Мәҡәлдәр, әйтемдәр өйрәнеү. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”, “Наҙлы һүҙ”	Әсәйҙәргә арналған күңел асыу сараһы. Бүләктәр әҙерләү.
Һаумы, ҡыш!	1-се аҙна (декабрь)	Балаларҙың ҡыш тураһында белемдәрен киңәйтеү. Һауа торошон билдәләү һәм аңлата белергә өйрәтеү. Һауа торошо тураһында халыҡ һынамыштары менән таныштырыу. Йыл миҙгелдәренең үҙгәреүе кешегә, үҫемлектәр һәм йәнлектәр донъяһына тьәҫир итеүе тураһында белешмәләр биреү. Ҡышҡы спорт төрҙәре менән таныштырыу. Ҡыш көндәре кешеләрҙең хәүефһеҙлеген һаҡлау ҡағиҙәләре тураһында балаларҙың белемдәрен арттырыу. Һыу һәм ҡар менән эксперименттар үткәргәндә балаларҙың аҡыл – зиһенен үҫтереү һәм эҙләнеү – тикшеренеүгә ҡыҙыҡһыныуҙарын үҫтереү. Тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Ҡышҡы хәрәкәтле һәм халыҡ уйындары уйнау. Сюжетлы-ролле уйын. Дидактик уйындар Түңәрәк уйындары. Әңгәмәләр. Һүрәт төшөрөү. Күҙәтеүҙәр. Һыу һәм ҡар менән тәжрибәләр үткәреү. Ҡыш тураһында рәссәмдарҙың картиналарын һәм иллюстрацияларын ҡарау. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”	“Ҡыш” темаһына арналған балаларҙың эштәренән күргәҙмә яһау.
Әсәм теле – сәсән теле!	2-се аҙна (декабрь)	Башҡорт теле буйынса белемдәрен тикшереү, үткән һүҙҙәрҙе тәржемә итеү. Ғорурланыу тойғоһон уятыу, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү. Башҡорт мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Балаларҙа туған тел, халыҡ йырҙары, әҫәиәттәре аша тыуған еребеҙгә, телебеҙгә, уның гүзәл тәбиғәтенә һөйөү, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү,	Тема буйынса әңгәмәләр үткәреү Нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау. Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”.	“Әсәм теле – сәсән теле!”

Ҡышҡы биҙәктәр	3-сө аҙна (декабрь)	Ҡыш тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Ҡыш көндәре балаларҙың хәүефһеҙлеген һаҡлау. Миҙгелдәге үҙгәрештәрҙе күрә белергә өйрәтеү: һауа торошо, үҫемлектәр, ҡош – ҡорт һәм йәнлектәр. Һыу һәм боҙ менән тәжрибәләр яһау һәм балаларҙың эҙләнеү – тикшеренеү һәләттәрен –үҫтереү.Ҡышҡы тәбиғәт менән һоҡланыу тойғоларын уятыу. Тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.	Тема буйынса әңгәмәләр үткәреү. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау. Һүрәттәр ҡарау, тасуирлау, төшөрөү. Әүәләү. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү.	Балалар эштәренән күргәзмә.
Яңы йыл	4-се аҙна (декабрь)	Балаларҙың Яңы Йыл тураһында белемдәрен киңәйтеү: (иртәлектәр, спектаклдәр, әкиәттәр; каникулдар, ата – әсәләр менән бергә байрамдар, ; теләктәр әйтеү; Ҡыш бабайҙың тыуған иле Лапландия тураһында мәғлүмәттәр биреү), ҡыш миҙгелдәре тураһында балаларҙың белемдәрен арттырыу. Бөтә төр балалар эшмәкәрлеген ойоштороу (уйын, коммуникатив, хеҙмәт, танып-белеү һ.б.). Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү мәҙәниәтен үҫтереү. Байрамда актив ҡатнашыу теләген уятыу. Бер-береһенә ихтирам тәриәләү.	Түңәрәк уйындарын өйрәнеү. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Күҙәтеүҙәр. Бүләктәр әҙерләү. Шыршы байрамына уйынсыҡтар әҙерләү. Төркөм бүлмәһен байрамса биҙәү. Сюжетлы – ролле уйындар. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”	Яңы йыл иртәлектәре. Балалар эштәренән күргәзмә.
Нардуған	2-се аҙна (ғинуар)	Балаларҙы башҡорт халыҡ йолалары, ғөрөф – ғәҙәттәре менән таныштырыуҙы дауам итеү , “Нардуған” байрамы, Селлә ваҡыты менән танышыу, байрамдың исемен, ғәмәлен атай белергә өйрәтеү. Балаларҙың иғтибарын, үҙләштереү, ҡабул итеүҙе, сенсор тойоу һәләтен, һорауҙарға яуап биреү оҫталығын үҫтереү. Башҡорт халҡының ғөрөф - ғәҙәттәренә, байрамдарына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм һөйөү тәрбиәләү.	Әңгәмәләр. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Һүрәттәр ҡарау, тасуирлау. Түңәрәк уйындарын өйрәнеү. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Күҙәтеүҙәр. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”	Күңел асыу сараһы “Нардуған”
Изгелек ерҙә ҡалмаҫ	3-сө аҙна (ғинуар)	Балаларға мәрхәмәтлек һәм уҫаллыҡ тураһында белем биреү. Гендер тәрбиәһе буйынса күҙаллауҙар үҫтереү. Яҡшы һәм насар кешене, геройҙарҙы, ситуацияларҙы ҡарау, баһалау. Мәрхәмәтле хис тойғолар тәрбиәләү.	Әңгәмәләр үткәреү. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай” . Һүрәттәр ҡарау. Әҙәби геройҙар һәм йәнһүрәттәрҙән яҡшы һәм насар персонаждарға, хәрәкәттәренә, ҡылыҡтарына анализ яһау.	Театр эшмәкәрлеге: әкиәт сәхнәлләштереү
Ҡышҡы уйындар	4-се аҙна (ғинуар)	Ҡыш тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Һауа торошон билдәләү һәм аңлата белергә өйрәтеү. Ҡышҡы спорт төрҙәре менән таныштырыу. Ҡыш көндәре кешеләрҙең хәүефһеҙлеген һаҡлау ҡағиҙәләре тураһында балаларҙың белемдәрен арттырыу.	Әңгәмәләр. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Һүрәттәр ҡарау. Түңәрәк уйындарын, өйрәнеү. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Шиғырҙар ятлау. Күҙәтеүҙәр Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”,	Саф һауала ҡышҡы уйындар уйнау.

		Диалогик телмәр үҫтереү. Балаларҙы мәргәнлеккә, сослоҡҡа өйрәтеү етеҙлек, йылдамлыҡ, һиҙгерлек тәрбиәләйҙәр	“Серле моҡсай” .	
Фән һәм ғилем	1-се аҙна (февраль)	Балаларға “фән” һәм “ғилем” һүҙҙәренә аңлатма биреү, кешегә килтергән файҙаһы тураһында һөйләү. Башҡорт халыҡ ижадына таянып фән һәм ғилем тураһында мәғлүмәт биреү. Диалогик телмәрҙе үҫтереү. Фәнгә ҡыҙыҡһыныу уятыу, һөйөү тәрбиәләү.	Тема буйынса әңгәмәләр үткәреү Нәфис әҙәбиәт уҡыу, әйтем, мәҡәлдәр иҫтә ҡалдырыу, һүрәттәр ҡарау. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”	Төрлө тәжрибәләр үткәреү.
Ҡышҡы урман	2-се аҙна (февраль)	Ҡыш тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Һауа торошон билдәләү һәм аңлата белергә өйрәтеү. Балаларҙың Башҡортостанда йәшәгән хайуандар тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү. Йәнлектәрҙең йәшәү шарттары, нисек ҡышҡа әҙерләнеүҙәре тураһында белемдәрен тикшереү. Хайуандар менән аралашыуҙа хәүефһеҙлек сараларын иҫкә төшөрөү. Балаларҙа хайуандарға ҡарата һаҡсыл ҡараш, яуаплылыҡ, мәрхәмәтлек тәрбиәләү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Ҡышҡы хәрәкәтле һәм халыҡ уйындары уйнау. Түңәрәк уйындары. Әңгәмәләр. Һүрәт төшөрөү. Күҙәтеүҙәр. Ҡыш тураһында рәссәмдарҙың картиналарын һәм иллюстрацияларын ҡарау, тасуирларға өйрәтеү. Диактик уйындар “Был ҡайсаҡ була”, “Нимә үҙгәрҙе”, “Рәссәм нимә эшләп бөтөрмәгән”, “Дауам ит”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә” h б.	Фотоһүрәттәр, һүрәттәр күргәҙмәһе
Ватанды һаҡлаусылар көнө	3-сө аҙна (февраль)	Балаларға патриотик тәрбиә биреү. Хәрби һөнәрҙәр менән таныштырыу. Шулай уҡ нисек итеп малайҙарға ҡыйыу, көслө, Тыуған илде һаҡлаусы батырҙар булып үҫергә кәрәклеген аңлатыу, әңгәмәләшеү. Гендер тәрбиәһе буйынса күҙаллауҙар үҫтереү. Атайҙарға ҡарата һөйөү, хөрмәт тойғолары тәрбиәләү.	Ҡулдан бүләктәр эшләү. Әңгәмәләр. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Йомаҡтар сисеү. Батырлыҡ т Дидактик уйындар “Был ҡайсаҡ була”, “Нимә үҙгәрҙе”, “Рәссәм нимә эшләп бөтөрмәгән”, “Дауам ит”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә” h б. тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү.	Атай, олатайҙарға бүләктәр әҙерләү.
Хеҙмәт – тормош сығанағы	4-се аҙна (февраль)	Балаларҙы профессиялар менән таныштырыуҙы дауам итеү (ашнаҡсы, табип, шәфҡәт туташы h.б.). Уларҙың хеҙмәте, эш ҡоралдары, башҡарған эш-хәрәкәттәре, хеҙмәттәренең һөҙөмтәләре тураһында аңлатыу. Ата-әсәләренең профессиялары тураһында һөйләргә өйрәтеү. Гендер тәрбиәһе буйынса күҙаллауҙар үҫтереү. Диалогик телмәр үҫтереү. Профессияларға ҡыҙыҡһыныу уятыу, ихтирам тәрбиәләү.	Тема буйынса әңгәмәләр үткәреү. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау. Мәҡәл, әйтемдәр иҫтә ҡалдырыу. Һүрәттәр ҡарау, тасуирлау. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Дидактик уйындар “Был ҡасан була”, “Нимә үҙгәрҙе”, “Рәссәм нимә эшләп бөтөрмәгән”, “Дауам ит”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә”.	Фотокүргәҙмә “Ата-әсәйемдең профессияһы”

Әсәйем – бергенәм	1-се аҙна (март)	Балалар эшмәкәрлегенең бөтә төрөн дә ойоштороу (уйын, коммуникатив, хеҙмәт, танып белеү, музыкаль, ижади-эстетик, нәфис әҙәбиәт һ.б.) Башҡорт халҡының әкиәттәрен уҡыу, һынамыштарын, уйындарын өйрәнеү. Халыҡ байрамдары, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, кәсептәре менән танышыу. Гендер тәрбиәһе буйынса күҙаллауҙар үҫтереү. Ғаиләгә, әсәйҙәргә, өләсәйҙәргә, апайҙарға, тәрбиәселәргә ҡарата һөйөү, хөрмәт тойғоларын тәрбиәләү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Әңгәмәләр. Йырҙар өйрәнеү. Уйындар. Бәләкәй күләмле хикәйәлрҙе , әкиәттәрҙе тыңлау. Ҡатын –ҡыҙҙарға ҡағылышлы ауыҙ – тел ижады өлгөләрен өйрәнеү. Сюжетлы – ролле уйындар “Ғаилә”. Дидактик уйындар “Кем күберәк наҙлы һүҙ әйтер?”, “Һөнәрҙең эш ҡоралдарын ата”. Әсәй, өләсәйҙәргә бүләктәр әҙерләү.	8 мартҡа арналған иртәлектәр.
Өләсәйем һандығы	2-се аҙна (март)	Халыҡ йолалары, байрамдары менән таныштырыу, башҡорт халыҡ уйындарына, шаян йырҙарына, таҡмаҡтарға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу. Диалогик телмәр үҫтереү. Балаларҙа халҡыбыҙҙың тарихына, мәҙәниәтенә, фольклорына һәм өлкән быуынға ҡарата ихтирам, ғорурлыҡ тойғоһон тәрбиәләү.	Әңгәмәләр. Күҙәтеүҙәр. Балалар эштәренән күргәҙмә. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. мәҡәлдәр, йомаҡтар , әйтемдәр өйрәнеү. Йырлы – бейеүле түңәрәк уйындары, йырҙар. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”	Өләсәйем һандығы күргәҙмәһе.
Яҙ килде	3-сө аҙна (март)	Яҙ миҙгеле билдәләре тураһында балаларҙың белемдәрен камиллаштырыу. Ҡояштың ер йөҙөнә яҡтылыҡ, йылылыҡ биреүе һәм тормош сығанағы булып тороуы хаҡында аңлатыу. Яҙ миҙгеленең кешегә , үҫемлектәр, йәнлектәр тураһында белешмә биреү. Һауа торошон миҙгелгә ярашлы билдәләргә өйрәтеүҙе дауам итеү. Тәүлек өлөштәрен билдәләргә өйрәтеү. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү мәҙәниәтен үҫтереү. Тәбиғәткә ҡыҙыҡһыныу уятыу, һөйөү тәрбиәләү.	Әңгәмәләр. Йырлы – бейеүле түңәрәк уйындары, йырҙар. . Дидактик уйындар “Ашарға ярай - ярамай”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә” Һ.б. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Тәбиғәткә бәйле мәҡәлдәр, йомаҡтар , әйтемдәр өйрәнеү. Ҡояшты күҙәтеү. Тәбиғәткә бәйле теләктәр. Һүрәттәр ҡарау, тасуирларға өйрәнеү.	Балалар эштәренән күргәҙмә.
Театр аҙнаһы	4-се аҙна (март)	Балаларҙы театрҙың килеп сығыу тарихы менән таныштырыу. Балаларҙы мимика, ишара, ым, хәрәкәт аша мөһим эмоцияларҙы күрһәтә белергә, ҡурсаҡ аша геройҙың эске торошон һүрәтләргә өйрәтеү. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү мәҙәниәтен, диалогик телмәрҙе үҫтереү. Театрға ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм һөйөү тәрбиәләү.	Әңгәмәләр. Йырлы – бейеүле түңәрәк уйындары, йырҙар. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Һүрәттәр ҡарау. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”	Театр эшмәкәрлеге: әкиәт сәхнәлләштереү

Китап – тбелем шишмәһе	1-се аҙна (апрель)	Китаптар ҡарау һәм уларға һаҡсыл ҡараш булдырыу. Программаға ярашлы күренекле башҡорт һәм рус яҙыусылары менән таныштырыу. Китапты биҙәүсе рәссамдар менән таныштырыу. Өндәрҙ дөрөҫ әйтеү мәҙәниәтен үҫтереү. Нәфис әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу уятыу, һөйөү тәрбиәләү.	Әңгәмәләр. Күҙәтеүҙәр. Һүрәттәр ҡарау, тасуирлау. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”	Билдәле балалар өсөн яҙған башҡорт һәм рус яҙыусылары ның китаптар күргәҙмәһе.
Космонавтар көнө	2-се аҙна (апрель)	Яҙ миҙгеленең үҙенсәлекле яҡтарын өйрәнеү: ҡояш яҡтыраҡ яҡтырта, ҡар ирей, үлән үҫә һ.б. Яҙ миҙгеленең матурлығын күрһәтә белеү. Балаға күк есемдәре (ҡояш, ай, йондоҙҙар) һәм башҡа күренештәр тураһында, Космонавтар көнө тураһында белем биреү. Гендер тәрбиәһе буйынса күҙаллауҙар үҫтереү. Тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.	Әңгәмәләр. Һүрәттәр ҡарау, төшөрөү. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”	Презентация ҡарау.
Ер көнө	3-сө аҙна (апрель)	Иҫтәлекле урындар менән таныштырыуҙы дауам итеү. Тыуған ил, тыуған ер тураһында балаларҙың күҙаллауҙарын үҫтереү. Үҙ тыуған еренә ҡарата ғорурланыу тойғоһон тәрбиәләү.	Балалар баҡсаһына яҡын өйҙәрҙе күҙәтеү. Балалар баҡсаһы территорияһы буйлап экскурсия., урам һепереүсе эшен һәм тәрбиәселәрҙең эшен күҙәтеү. Затон биҫтәһенең урамдарын һәм иҫтәлекле урындарҙы һүрәтләгән фотоһүрәттәр ҡарау. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау.	Балалар эштәренән күргәҙмә
Халҡым йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәрре	4-сеаҙна (апрель)	Балаларҙы башҡорт халҡының йолалары менән таныштырыу. Яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен төшөндөрөү. Халыҡ йолаларының уйындар, ғәҙәттәр, әйтемдәр, йырҙар, халыҡ көйө, бейеүҙәр менән һуғарылыуын күрһәтеү. Гендер тәрбиәһе буйынса күҙаллауҙар үҫтереү. Башҡорт халҡының йололарына һәм ғөрөф-ғәҙәттәренә ҡыҙыҡһыныу уятыу, һөйөү тәрбиәләү.	Тема буйынса әңгәмәләр үткәреү. Сюжетлы ролле уйын “Ғаилә” Нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау. Мәҡәл, әйтемдәр иҫтә ҡалдырыу. Һүрәттәр ҡарау, тасуирлау. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”.	“Ҡунаҡ ҡаршылау” уйыны.
Еңеүгә дан!	1-се аҙна (май)	Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Һәйкәлдәр менән таныштырыу. Олатайҙар һәм өләсәйҙәрҙең хәрби миҙалдар һәм ордендар тураһында һөйләү. Гендер тәрбиәһе буйынса күҙаллауҙар үҫтереү. Патриотик тәрбиә биреү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау. Йырҙар тыңлау, өйрәнеү һәм йырлау. Әңгәмәләр һәм ситуатив һөйләшеүҙәр. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”. Балалар эштәре	Фотокүргәзмә “Минең олатайым – ил һаҡсыһы”

			күргәзмәһе. Тематик тәбиғи белем биреү эшмәкәрлеге.	
Халҡымдың шөғөл-кәсептәре	2-се аҙна (май)	Ат тәрбиәләү, һыбай йөрөү тураһында һөйләү. Башҡорт халҡының борондан килгән шөғөлдәре менән таныштырыу. Ир балаларға һөнәр, хужалыҡ эштәре хаҡында аңлатыуҙар, эшкә йәлеп итеү. Ҡорот яһау, киптереү, ҡош- ҡорт үҫтереү. Хайуандарға һөйөү, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.	Тема буйынса әңгәмәләр үткәреү. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау. Мәҡәл, әйтемдәр иҫтә ҡалдырыу. Һүрәттәр ҡарау, тасуирлау. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Балалар эштәренән күргәҙмә.	Фотокүргәҙмә үткәреү.
Милли ризыҡ	3-сө аҙна (май)	Балаларҙың башҡорт милли ризыҡтары тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү. милли аш төрҙәрен өйрәтеү, уларҙың әһәмиәтен аңлатыу. халҡыбыҙҙың милли аштары әҙерләүҙә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү мәҙәниәтен үҫтереү. Милли ризыҡҡа һөйөү тәрбиәләү.	Тема буйынса әңгәмәләр үткәреү. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау. Мәҡәл, әйтемдәр иҫтә ҡалдырыу. Һүрәттәр ҡарау, тасуирлау, төшөрөү. Әүәләү. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Фотокүргәҙмә үткәреү.	Балалар эштәренән күргәҙмә.
Һаумы, йәй!	4-се аҙна (май)	Йәй миҙгелендә тәбиғәттәге үҙгәрештәр. Йорт хайуандары, ҡоштар, йәшелсәләр, емеш-еләктәр тураһында һөйләшеү, белемдәрҙе үҫтереү, арттырыу. Тәбиғәттә үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре менән таныштырыу (үҫемлектәрҙе өҙөргә ярамай, ағас ботаҡтарын һындырмаҫҡа, хайуандарға, бөжәктәргә ҡағылмаҫҡа һ.б.). Диалогик телмәрҙе үҫтереү. Тәбиғәткә ҡыҙыҡһыныу уятыу, һөйөү тәрбиәләү.	Йомғаҡлау. Күҙәтүҙәр үткәреү. Йәй миҙгеле менән бәйле нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау, һүрәттәр ҡарау, төшөрөү, тасуирлау. Әүәләү. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”.	Йомғаҡлау саралары.
Бәхетле баласаҡ!	1-се аҙна (июнь)	Йәй миҙгелендә тәбиғәттәге үҙгәрештәр. Йорт хайуандары, ҡоштар, йәшелсәләр, емеш-еләктәр тураһында һөйләшеү, белемдәрҙе үҫтереү. Байрам тураһында белем биреү. Балаларға ҡыуаныс-бәхеткә тулы бала саҡтан да матур мәл юҡлығын аңлатыу. Бер-береһенә ихтирам тәрбиәләү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау. Йырҙар тыңлау, өйрәнеү һәм йырлау. Әңгәмәләр. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”.	Күңел асыу сараһы.
Салауат Юлаев – башҡорт халҡының милли батыры.	2-се аҙна (июнь)	Башҡорт халыҡ батыры Салауат менән таныштырыу. Патриотик тәрбиә биреү. Батырлыҡ тураһында белемдәр байытыу. Башҡорт тарихына балаларҙы ылыҡтырыу. Салауат ижады һәм уның тормошо менән таныштырыу. Һунарсы һөнәре һәм һунарсылыҡ тураһында балаларға тәү мәғлүмәттәр биреү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар өйрәнеү. Дидактик уйындар “Һүрәтте төҙө” һ.б., хәрәкәтле уйындар уйнау. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Һүрәттәр ҡарау.	Презентация ҡарау.

Пушкин көндәре	3-сө аҙна (июнь)	Рус әҙәбиәт яҙыусыһы һәм шағир А.С. Пушкин менән һәм уның балалар өсөн яҙған әсәрҙәре менән таныштырыу. Диалогик телмәрҙе үҫтереү. Нәфис әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу уятыу, һөйөү тәрбиәләү.	Әңгәмәләр. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау һәм төшөрөү. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”.	Лукоморье иленә сәйәхәт
Дуҫлыҡтың ҡәҙерен бел	4-се аҙна (июнь)	Башҡортостанда төрлө һөнәр эйәләре эшләүе һәм дуҫ йәшәүе тураһында һөйләү. Кешеләр үҙ-ара аралашып, ҡатнашып йәшәй һәм һәр саҡ билдәле бер тәртип ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрөү. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү мәҙәниәтен үҫтереү. Бер-береһенә ҡарата ихтирам, дуҫлыҡ тойғоларын тәрбиәләү.	Дуҫлыҡ тураһында әкиәттәр уҡыу, әйтем, мәҡәл иҫтә ҡалдырыу, шиҡырҙар ятлау. слайд, һүрәттәр ҡарау, уйындар уйнау, йырҙар йырлау, сәхнәшәштереү. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”.	Әкиәт сәхнәләштереү.
Нимә яҡшы, нимә насар!	1-се аҙна (июль)	Балаларҙа әхлаҡи матди күҙаллау, әхлаҡи фекерләү формаллаштырыу. Нимә яҡшы, нимә насар икәнен аңлатыу. Яҡшы һәм насар эш тураһында төшөнсә биреү, үҙ ҡылыҡтарына анализ яһарға өйрәтеү. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү мәҙәниәтен үҫтереү. Балаларҙа бер-береһенә ҡарата ихтирам тәрбиәләү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау һәм төшөрөү. Йырҙар тыңлау, өйрәнеү һәм йырлау. Әңгәмәләр. Саф һауала төрлө хәрәкәтле уйындар ойоштороу һәм үткәреү.	Әкиәт сәхнәләштереү.
Сәләмәт тәндә – сәләмәт рух. Йәйге уйындар.	2-се аҙна (июль)	Һаулыҡ һәм сәләмәт тормош рәүеше тураһында балаларҙың белемдәрен камиллаштырыу. Балаларҙа үҙенең тышҡы ҡиәфәтендә матурлыҡ, таҙалыҡ һаҡлауға ынтылыш тәрбиәләү. Гигиена кәрәк – яраҡтары менән үҙ – аллы эш итә белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Саф һауала төрлө хәрәкәтле уйындар ойоштоу һәм үткәреү. Кәүҙә һәм һиҙеү ағзаларының тирә – йүнде, ысынбарлыҡты аңлау һәм өйрәнеүҙәге роле тураһында төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Кешегә файҙаллы витмаиндар һәм башҡа аҙыҡтар тураһында күҙаллауҙар үҫтереү. “Һаулыҡ” һәм “ауырыу” төшөнсәләре менән таныштырыу.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау һәм төшөрөү. Йырҙар тыңлау, өйрәнеү һәм йырлау. Әңгәмәләр. Саф һауала төрлө хәрәкәтле уйындар ойоштороу һәм үткәреү. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”.	Саф һауала хәрәкәтле уйындар үткәреү.
Тәмлекәстәр көнө	3-сө аҙна (июль)	Балаларҙы шәкәрҙең килеп сығыу тарихы менән таныштырыу. Төрлө тәмлекәстәр тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү. Диалогик телмәр үҫтереү. Үҙ	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау, төшөрөү. Әүәләү. Әңгәмәләр ҡороу. Шәкәр һәм һыу	Күңел асыу дәресе.

		һаулығыңа һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.	менән тәжрибәләр үткәреү. Балалар эштәренән күргәзмә. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”.	
Урманда хаҡ бул!	4-се аҙна (июль)	Балаларҙы хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре менән таныштырыуҙы дауам итеү, ни өсөн кәрәклеген аңлатыу. Төрлө ситуатив ваҡиғаларҙа үҙеңде нисек тоторға һәм ниндәй ҡағиҙәләр үтәргә. Тәбиғәттә үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре менән таныштырыу (үҫемлектәрҙе өҙөргә ярамай, ағас ботаҡтарын һындырмаҫҡа, хайуандарға, бөжәктәргә ҡағылмаҫҡа һ.б.). Тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау, төшөрөү. Әңгәмәләр. Саф һауала төрлө хәрәкәтле уйындар ойоштоу һәм үткәреү. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”.	Һүрәттәр күргәзмәһе.
Башҡорт халыҡ уйындары	1-се аҙна (август)	Башҡорт халҡының мәҙәни мираҫына ҡыҙыҡһыныу уятыу. Балаларҙы башҡорт халҡының мәҙәниәтен, уйындарын өйрәнеүҙе дауам итеү. Уйындар кешелә ғәйрәтлелек, сыҙамлылыҡ, етеҙлек кеүек сифаттар үҫтерә һәм тәрбиәләй, башҡалар менән аралашырға өйрәтә. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү мәҙәниәтен үҫтереү. Уҡыусыларҙы башҡорт халыҡ традициялары менән таныштырыу. Башҡорт халыҡ уйындары аша төрлө физик сифаттар тәрбиәләү, халыҡ традицияларына, ғөрөф-ғәҙәттәренә ихтирам уятыу.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Түңәрәк уйындарын өйрәнеү. Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау. Әңгәмәләр ҡороу. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”.	Саф һауала башҡорт халыҡ уйындарын үткәреү.
Үҙ үҙемде уйлайым, һаулығымды һаҡлайым	2-се аҙна (август)	Кеше тураһында мәғлүмәт биреү, тән төҙөлөшө, тән өлөштәре тураһында белемдәрен үҫтереү, киңәйтеү. Сәләмәт тормош алып барыу; файҙалы һәм зарарлы ризыҡтар тураһында һөйләшеү. Балаларҙы хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре менән таныштырыуҙы дауам итеү, ни өсөн кәрәклеген аңлатыу. Төрлө ситуатив ваҡиғаларҙа үҙеңде нисек тоторға һәм ниндәй ҡағиҙәләр үтәргә. Гендер тәрбиәһе буйынса күҙаллауҙар үҫтереү. Бер-береһенә һаҡсыл ҡараш, ихтирам тәрбиәләү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау һәм төшөрөү. Әңгәмәләр ҡороу. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”.	Саф һауала төрлө хәрәкәтле уйындар ойоштороу һәм үткәреү.

Рәсәй киноһы көнө	3-сө аҙна (август)	Кино сәнғәтенең бер төрө – йәнһүрәт уның килеп сығыу тарихы менән таныштырыу. Үҙ аллы фекер йөрөтөргә, үҙ –ара аралашырға өйрәтеү, хәтерҙе, иғтибарҙы фантазияны үҫтереү. Кино сәнғәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу, һөйөү тәрбиәләү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау, төшөрөү. Әңгәмәләр ҡороу. Әүәләү. Йәнһүрәттең йырҙарын тыңлау, өйрәнеү. Йәнһүрәт ҡарау. Дидактик уйындар: “Минең ғаиләм”, “Ниндәй әкиәттән геройҙар?”, “Айырып һал”, “Серле моҡсай”.	Балалар эштәренән күргәҙмә
Һау бул, йәй!	4-се аҙна (август)	Балаларға йәй һәм көҙ миҙгеленең үҙгәрештәрен иҫкә төшөрөү. Йомаҡтар сисеү,тәрбиәсенең ҡыҙыҡлы һорауҙарына яуап биреү. Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен ҡабатлау . Гендер тәрбиәһе буйынса күҙаллауҙар үҫтереү.Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау, йомаҡтар сисеү. Иллюстрациялар, һүрәттәр ҡарау, төшөрөү. Әңгәмәләр ҡороу. Әүәләү. йырҙар тыңлау, өйрәнеү.	Йомғаҡлау саралары.